# ЗИМАГОР

Ауыл халҡы әле лә булһа уны иҫкә алып һөйләй:

— Һуғыш заманында инде бик күп кешеләрҙең башы юғалды... Бына әле Һиҙиәт... Ниндәй уңған егет ине. Ундай ныҡ йөрәкле кешеләр беҙҙең заманда һирәк була ул... Даром что «зимагор» булһын, егетең батырлығын күрһәтә алды,— тиҙәр.

Кемдәр генә белмәй, тиһең, гармунсы Һиҙиәтте. Ул саҡта әле уны «зимагор Һиҙиәт» тип йөрөтәләр ине. Булғандыр шул. Зимагор ҙа булғандыр, ярлы егеттең ғүмере ниҙәр генә күрмәй. Бәләкәй сағында уҡ етем ҡалғас, яҡындары ла булмағас, төрлө эштәр кискәндер уның башынан...

Бәләкәй ваҡытта уҡ ул сит илдәргә эшкә сығып киткән. Самара — Златоуст тимер юлында эшләгән. Златоуст заводтарында төрлө ҡара эштәр эшләп йөрөгән. Завод ҡарауылсыһы ла булып торған, күп нәмәләр күргән. Бына тик һуғыш башланыр алдынан ғына ауылдарына — тыуған ауылы «Ҡайынлы һаҙ»ға ҡайтҡан да Ниғмәт байға ялсы булып кергән. Шунда уны «зимагор Һиҙиәт» тип атанылар. Тыуған иленә ҡайтҡыһы килгәндер. Белмәҫһең.

«Ҡайынлы һаҙ»ҙа үткән ҡайғылы йәшлеге, йәш йөрәкте үҙенә аулап ҡалған матур ҡыйғас ҡашлы, тимерсе Вәли ҡыҙы Гөлниса ла, йәмле «Йәүбәзе буйҙары» һағындырған булғандыр инде...

«Ҡайынлы һаҙ» ауылы егеттәре араһында иң көслө булған егеттәрҙән һанала ине «зимагор Һиҙиәт». Ниғмәт байҙың өс атын бер үҙе йөрөтә. Ҡай саҡта, көлтә ташыған саҡтарҙа, халыҡтың арбаһы ауып, тайғаҡ тауҙарҙан мендерә алмай ятҡанда Һиҙиәтте осраһалар, шатланып китәләр. Һиҙиәт нисек булһа ла эште рәтләй. Атҡа тартырға ауыр булған көлтә арбаһын, ат менән бергәләп, тауҙан мендереп ебәрә.

Шуға күрә ауыл халҡы уны ярата:

— Һиҙиәт ул уңған егет, ҡайҙа барһа ла хур булмаҫ,— тиҙәр.— Ләкин бына Ниғмәт бай менән генә ул тыныс тора алмай. Байға инде ни тиклем генә хеҙмәт итһәң дә, ярап булмай бит ул. Ниғмәт Һиҙиәтте әрләй:

— Әрәм тамак, зимагор! Ниңә аттарҙы был тиклем тирләттең?

Һиҙиәт тә яуапһыҙ ҡалмай:

— Суҡынып киткере, йыуан ҡорһаҡ, тағы һиңә нисек эшләргә кәрәк инде. Бер нисек тә килешмәй. Әкрен йөрөһәң — ялҡау, тиһең, шәп йөрөһәң — аттарҙы тирләтәһең, тиһең. Һин бынан һуң миңә һүҙ өндәшәһе булма...

— Әле һин минең менән талашмаҡсы булаһыңмы ни, өтәләгән күркә. Хәҙер урядникты саҡырып килтерермен дә...

— Килтерһәң тағы, бер ҙә ҡурҡыусы юҡ әле бында, урядник түгел, батшаһы килмәҫме тағы...

Бына шуға күрә уны ауылдың байҙары, муллалары бер ҙә яратмайҙар:

– Ҙурҙарға баш эймәй, йәштәрҙе боҙоп бөтөрөр әле ул зимагор,— тиҙәр. Ауылдың ярлы-ябағайы, батрактары Һиҙиәтте үҙҙәренең дуҫы итеп ҡарайҙар. Ҡарттар байҙар менән тиргәшкәндә Һиҙиәткә таяналар...

Ну, гармун уйнап ебәрә лә инде үҙе, сыҙа ла тор, өҙҙөрә инде бына, өҙҙөрә.

Аяҙ көҙгө көндәрҙә Хәмит (теге «ристан» Сәйфи малайы Хәмит) менән икәүләп улар ауыл башына барып йырлағанда бөтә тирә-яҡ яңғырап тора. Һиҙиәт матур итеп гармунда уйнай, ә Хәмит, иҙеүҙәрен сисеп, көр тауыш менән тирә-яҡты яңғыратып, йырлап ебәрә.

Алдыр алъяпҡыстары, гөлдөр алъяпҡыстары
Юҡ тиһәң дә, барҙыр әле күңел йыуатҡыстары?

Матур, көслө тауыш «Йәүбәзе» йылғаһы буйлап, ваҡ ҡына тулҡынсыҡтар яһап киң ҡырҙарға, Ағиҙел буйҙарына тиклем тарала...

Үҙ ағай-эне, ауыл егеттәре Һиҙиәтте яраталар. Баҫыуҙа эшләгәндә күрһәләр, бигерәк тә инде бесән өҫтөндә-фәләңдә Һиҙиәт осраһа, йылмайып уҡ ебәрәләр.

— Һәй!.. Зимагор Һиҙиәт булғанда, донъя сүп тә түгел. Әйҙә әле, егет, йырлат әле гармуныңды!..

1914 йылды Һиҙиәтте һуғышҡа алдылар. Ниғмәт бай бер ваҡытты:

— Был зимагорҙы әҙерәк тәүфиҡҡа килтерергә кәрәк,— тип урядникты саҡырып алғас, Һиҙиәт уны һүккәндә лә, начальниктар бик асыуланып ҡалғандар ине. Һуғыш сыҡҡас та инде, иң элек уға барып йәбештеләр.

Үгеҙ кеүек таҙа егет ул. Мулла-монтағай, бай балалары һуғыштан ҡасып, ҡолаҡтарын, аяҡтарын боҙоп, ҡалалағы һуғыш начальниктарына взятка биреп» һалдаттан ҡалырға йөрөгәндә, уйлап та бирмәне.

Ниңә уйлаһын, уның кеме бар? Уны яратып йөрөгән юғары остоң тимерсе Вәли ҡыҙы Гөлнисанан башҡа бер кеме лә юҡ уның...

Улар һуғышҡа киткәндә, халыҡ бик күп йыйылғайны. Ҡайһы берәүҙәрҙең әсәләре, аталары, ҡайһыларының туғандары килгән — оҙаталар. Илаш, һыҡраш. Муллалар, мәзиндәр «фатиха» ҡылалар, мулла һөйләй:

— Беренсе алла, икенсе батша. Батша юлында шаһит китһәгеҙ — урынығыҙ ожмахта булыр,— ти ул.

Ҡарсыҡтар, биҙәкле алъяпҡыстарының мөйөштәре менән күҙ йәштәрен һөртөп:

— Шулай булһын инде, хәҙрәт, шулай булһын,— тиҙәр. Муллаларға 2-шәр тин, 5-әр тин хәйер бирәләр, муллалар бит һыйпайҙар.

Һиҙиәтте бер кеше лә оҙатмай, уның бер кеме лә юҡ...— Ниңә тиҙерәк булмайҙар икән тигән кеүек, тирә-яҡҡа тынысһыҙланып ҡаранғылай, үҙе аҡрын ғына гармунының телдәрен ҡысҡыртып ултыра. Үҙе халыҡҡа бер ҙә ҡарамай.

Киткәндә арттан «тәкбир» әйтеп ҡалдылар:

— Аллаһы әкбәр, аллаһы әкбәр...

Һиҙиәт эсенән генә уйлай...

— Аллағыҙ, ниҙәрегеҙ менән суҡынып киткерҙәре, бысағыма шулай әкрен маташалармы икән ни былар? — ти ул.

Аттар ҡуҙғалып киткәс, Һиҙиәт гармунды өҙҙөрөп уйнап ебәрҙе. Халыҡ араһында тауыш, илаш күтәрелде.

— Эй балаҡайым, иҫән-һау ғына ҡайтһағыҙ ярар ине, игендәр ҙә йыйыштырылмай ҡалды...

— Йәшләй генә егем ҡалдым шул, эй-й-й аллаҡайым...

— Хат яҙғылап тороғоҙ инде, исмаһам...

Кешеләрҙең күҙ алдарынан һөрөмдәр оса, бөтә илде ҡайғы ҡаплаған. Алдарында үлем ҡурҡынысы күреп барған егеттәр ҡалғандарҙы йыуатҡан булалар:

— Ҡайғырмағыҙ, бына тишекле бер тин кеүек тағы ялтырап ҡайтып етербеҙ әле!..

Һиҙиәт матур итеп гармун уйнай. Мулла:

— Тәкбир тауышы тынғансы ул шайтан уйынын лығырҙатмаһаң да ярар ине, яуыз,— ти.

Һиҙиәт:

— Һин үҙең лығырҙама, ҡарт дуңғыҙ,— тиеүҙән башҡаны әйтмәне.

Гөлниса ауыл ҡапҡаһы янында Һиҙиәтте көткән икән, илай-илай Һиҙиәтте оҙата:

— Һау бул инде... көтөрмөн...— тине лә башындағы аҡ яулығы менән күҙенән атылып сыҡҡан ҡайнар йәштәрен һөртә башланы. Уның матур ҡара күҙҙәре ҡайнар йәш аша моңдар түгеп торалар ине. Әкрен генә иҫкән төньяҡ еленә Гөлнисаның ҡара оҙон толомдары матур елберләйҙәр...

Һиҙиәт, Гөлниса күҙҙән юғалғансы, артҡа ҡарап барҙы.

1917 йыл көҙөндә көслө революция өйөрмәһе килеп етте.

Һиҙиәт һуғыштан ҡайтҡан. Тыуған илен, матур Гөлнисаһын һағынғандыр, кем белә... Әллә тағы, ҡайғылы етем йәшлегенең моңло хәтирәләре, яңғыратып гармун уйнап йөрөгән «Йәүбәзе буйҙары» уны һуңғы тапҡыр, бәлки, бында тартҡандарҙыр.

Ләкин ул ҡайтыуға, Гөлниса юҡ ине инде.

Тимерсе Вәли — Гөлнисаның атаһы, һалдатҡа китеп юғалғас, әсәһе меҫкенкәй волосҡа пенсия алырға барғанда бер ҡышты юлда туңып үлгән. Гөлниса бер үҙе нишләһен — бәхетһеҙлек ҡушыуы буйынса, шул ауылдың

мәзин малайы Ғәйнанға кейәүгә сыҡҡан да, Ғәйнан-жулик уны әллә ҡайҙа Төркөстанғамы, ти, шунда алыҫтарға илтеп һатҡан. Халыҡ шулай һөйләй...

Һиҙиәт ҡайтҡанда, мәзин малайы Ғәйнан өйҙә ине. «Зимагор»ҙың йөрәге түҙмәне — мәзиндәргә китте. Уның билендә ике бомба, наган, яурынында мылтыҡ. Мәзиндәргә барып ингәс тә, өйҙәге халыҡтың ҡот-йәне ҡалманы. Һиҙиәт Ғәйнандың күҙенә ҡарап:

— Дуңғыҙ балаһы! —тине.

Атырға тип наган күтәрҙе — ләкин атманы.

— Был эткә пуля әрәм итеп маташҡансы, исмаһам Юденич фронтына китергә кәрәк тә, унда инде быларҙың бөтәһе менән дә һуғышырһың. Был этте генә үлтереп нәмә була? — тип уйланы ул. Сыҡҡанда, ласт иттереп, Ғәйнандың йөҙөнә төкөрҙө.

Бер йыл ваҡыт үтер-үтмәҫтән Һиҙиәт тағы һуғышҡа китте. Ләкин был һуғыш — синфи һуғыш, эшсәндәрҙең Октябрен дошмандарҙан һаҡлау һуғышы ине...

Һиҙиәт үҙе менән бергә Герман фронтында йөрөп ҡайтҡан Хәлил менән ҡалаға китте. Герман фронтында улар, һуғыштың кәрәкмәгәнлеген, был эшсәндәрҙең ҡанын түгә торған, эшсәндәрҙе генә ғазаплай торған һуғыштың кәрәкмәгәнлеге тураһында күп кенә ишеткәйнеләр ине инде. Һәм был фронтҡа ҡаршы һөйләүсе, бөтә власты Советтарға, эшсәндәрҙең үҙҙәренә, алырға кәрәк икәнен һөйләүсе кешеләрҙең большевиктар икәнен дә beləләр ине. Улар, ҡалаға барғас, Коммунистар партияһына яҙылдылар.

Ауылда ҡалған байҙар, муллалар халыҡ араһында ҡотҡо тараталар:

— Большевиктар улар бары ла бына шул Һиҙиәт кеүек зимагорҙар икән, кеше талайҙар, ти. Мәсеттәрҙе яндыралар, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләйҙәр имеш, тиҙәр...

Һиҙиәт тағы фронтҡа китте. Ил егеттәре менән ең һыҙғанып ҡара өйөрмәгә ҡаршы сыҡтылар, йәш илгә ҡаршы килгән дошман сигенде, сигенде лә ҡыҙылдарҙың ялҡынлы штыктары менән диңгеҙҙәргә түгелде— ил тынысланған кеүек булды.

Ләкин...

Зимагор Һиҙиәт тағы ҡайтманы. Көньяҡ фронтында уның менән бергә булған иптәштәре һөйләнеләр:

— Һиҙиәт беҙҙең ҡалала төҙөлгән Азин отряды менән бергә булған да, фронтты йырып, алға, дошмандың артына, барып, улар күҙгә-күҙ ҡарашып һуғышҡандар. Был һуғышта Азин отрядынан бер генә кеше лә ҡотола алмаған.

Синфи көрәштең ут йөрәкле батыр ҡаһармандары ҡанлы көрәштә йәш советтар иле өсөн ҡорбан булдылар...

Улар менән бергә «зимагор» Һиҙиәт тә үҙ синыфының еңеүе өсөн йәнен бирҙе.

Волга-Каспи сәхрәләре өҫтөнән күсеп йөрөгән сая елдәр генә «зимагор» Һиҙиәттең дошмандарға ҡаршы ялтыраған ҡылысы, ер һелкетеп шартлаған бомбалары тураһында иҫтәлектәр һөйләйҙәрҙер...